Башҡортостан Республикаһы
Ишембай ҡалаһы 3-сө һанлы урта мәктәп

# Дәрестән тыш  сараларҙы ойоштороу тәжрибәһе



Ишембай - 2019

Башҡортостандың атҡаҙанған уҡтыусыһы, педагогия фәндәре кандидаты Аҙнабаева Гөлнур Шамил ҡыҙы



# Актуаллеге:

- - тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә күтәрелгән проблемаларҙы тәрәнәйтеү, киңәйтеп асыу өсөн халыҡтың этник, мәҙәни тарихына экскурс;
- - тәрбиәүи мөмкинлектәрҙе халыҡ педагогикаһына таянып ойоштороу;
- - уҡыусының үҫеш кимәлен үҫтереү өсөн төрлө яҡлы шөғөлдәр аша эш итеү:
- - халыҡтың күркәм шәхестәре өлгөһөндә ижади һәм рухи ҡиммәттәрҙе барлау, уларға ҡарата дөрөҫ мөнәсәбәт тәрбиәләү.

**Гипотезаhы:**

Тел hәм әҙәбиәт дәрестәрендә өйрәнелгән тема йә күтәрелгән проблеманың өҫтәлмәhе /дауамы/ рәүешендә ойошторолған дәрестән тыш сарала эш алымдары ижади фекерләүгә бәйле, информацион саралар ярҙамында тәрәнәйтелhә, был саралар күпкә ҡыҙыҡлы hәм йөкмәткеле, файҙалы буласаҡ.

**Көслө беләге менән,**

**аҡыллы белеме менә**



# Маҡсаты һәм бурыстары

**Рухлы, төплө фекерле уҡыусы шәхесе тәрбиәләү өсөн уларҙа милли ғорурлыҡ, рухи ныҡлыҡ тәрбиәләү.**

- Тел һәм әҙәбиәт дәрестәре программалары менән йәнәшә тәрбиәүи эш алып барыу, әҙәбиәт миçалына туҡталыу юлы менән күберәк яҙыусылар ижады менән таныштырыу;
- күп яҡлы мәҙәни программа нигеҙендә уҡыусыға оҡшарлыҡ шөғөлдәр билдәләү, уның мөмкинлектәрен киңәйтеү.

# Тәрбиәүи йүнәлештәрҙең маҡсатҡа ярашлы ҡыҫҡаса үҙбилдәләнеше, йөкмәткеһе:



# Тәрбиәүи йүнәлештәрҙең үҫеш мөмкинлеген тыуҙырыу йөкмәткеһе һәм алынасаҡ һөҙөмтәһе:

- -төрлө милләт балаларының аралашып, тыныс, дуҫ йәшәүенә йүнәлтелгән саралар; (социаль яҡлау)
- - төрлө шарттарҙа ла кеше булып ҡалыу йүнәлешен бирерлек әҫәрҙәр өлгөһөндә ойошторолған саралар; (граждандлыҡ позицияһы)
- - ижад аша халыҡ аҡылын, ижадын өйрәнеү, уна артабан үҫтереүгә йүнәлтелгән саралар; (интеллектуаль үҫеш)
- - халыҡтың үткәне, тарихы аша уның бөгөнгөһөн, киләсәген күҙаллаусы саралар, кеше һәм йәмғиәт, һайлаясаҡ һөнәр йүнәлеше; (хоҡуҡи аң)
- - туған тел байлығын тыуған ер булмышы менән бәйләүсе саралар; (юғары партиотик тойғо)
- - практик эштәр аша мауығыу, һөнәри ҡыҙыҡһыныуға йүнәлтелгән саралар; (эшлекле уйын, практик ҡул эштәре)


Ҡомар
Башҡорт халыҡ ижадында тәрбиә ҡанундары
Башҡорт халҡының йола байрамдары. Шәжәрә фәлсәфәһе;
Башҡорт халыҡ йырҙары, бейеүҙәре
Халыҡ шөғөлдәре, ҡул эштәре, биҙәнеү әйберҙәре эшләү
Халыҡ уйындары, балалар уйындары;

# Дәрестән тыш сарала шөғөлләнеү формалары:

- әҙәби әҫәр ваҡиғаһын тормош менән бәйләүсе әңгәмә, дискуссия, диспут, конференция, лекция, ғилми эҙләнеү;
- уҡыусының художестволы һәләте, мөмкинлектәренә нигеҙләнеүсе формалар: концерт, конкурс, спектакль, байрамдар;
- ҡул эше хеҙмәте менән бәйле формалар: башҡорт теле кабинетын байытыу, мөйөштәр булдырыу, ҡурсаҡтар кейендереү, милли биҙәүестәр эшләү (нағыш, селтәр, йөн баҫыу һ.б.), аш-һыу әҙерләү (рецептар);
- халыҡ уйындары – уйын формаһы: эшлекле уйын, КВН, инсценировка, ситуатив уйын, уйын ҡоралдары яһау (уҡ -йәйә)һ. б. ;
- психологик ярҙам йүнәлешендәге саралар: әңгәмә, тренинг, музыкаль ринг, һүҙ оҫталары бәйгеһе, ҡара-ҡаршы әйтеш, төрлө йүнәлешле тестар, мәҡәл, әйтем, фразеологизмдар бәйгеһе һ.б.;

# Дәрестән тыш сараларҙың үҙенсәлекле юлдары, эш формалары

Ғилми эштәргә әҙерләнеү, эҙләнеү

Ижади эштәр: инша, эссе, шиғыр, көләмәс яҙыу

Класс гәзите, стенды эшләү.

Республика, район гәзиттәренә мәҡәләләр әҙерләү

Тасури уҡыу, ятлау, һүҙ бәйгеһенә әҙерләнеү

Ҡул эштәре, милли халыҡ кейемдәре, биҙәнеү әйберҙәре эшләү

Халыҡ йолалары, шәжәрәләр менән танышыу

# ИҒТИБАРЫҒЫҘ ӨСӨН ҘУР РӘХМӘТ!!!

